# IX класс уҡыусылары өсөн туған (башҡорт) телдән дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үткәреү өсөн өлгө материалдарҙың үҙенсәлектәре

# IX класс уҡыусылары өсөн туған (башҡорт) телдән дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үткәреү өсөн өлгө (демонстрацион) материалдарҙың үҙенсәлектәре (спецификация)

Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үткәреүҙең маҡсаты – уҡытыу рус телендә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмаларының IX класын тамамлаусы уҡыусыларҙың башҡорт теленән әҙерлек кимәлен баһалау

**Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһының йөкмәткеһен билдәләүсе документтар:**

1. Төп дөйөм белем биреүҙең Федераль дәүләт белем биреү стандарттары https://irorb.ru/wp-content/uploads/2021/09/fgos-ooo-prikaz-minprosvescheniya-rossii-ot-31.05.2021--287.pdf
2. Туған (башҡорт) тел уҡыу предметының белем биреү өлгө программаһы (V-IX кластар).

**Йөкмәткене һайлау һәм өлгө материалдарҙы төҙөү алымдары:**

Төп дөйөм белем биреү мәктәбен тамамлаусыларҙың коммуникатив эшмәкәрлеген һәм телде белеү кимәлен билдәләү өсөн, имтиханда төрлө типтағы биремдәр файҙаланыла.

Уҡыусыларҙың тәҡдим ителгән эш биремдәрен башҡарып сығыуы уларҙың башҡорт телен үҙләштереү дәрәжәһен асыҡларға ярҙам итә.

# Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы материалдарының төҙөлөшө һәм йөкмәткеһе

Имтихан материалдары 3 бүлектән тора. Был бүлектәрҙә төрлө төҙөлөштәге эш биремдәре урын ала.

Уҡыусыға имтихан биргәндә, тәҡдим ителгән 4 вариант яуаптың береһен һайлап алыу мөмкинлеге булған 10 һорау, ҡыҫҡа яҙма яуап талап иткән 10 һорау (килтерелгән текст буйынса) һәм киңәйтелгән яуап (8-10 һөйләм) яҙыуҙы талап иткән 1 бирем тәҡдим ителә.

# **Төҙөлөшө яғынан** башҡорт теленән имтихан 3 өлөштән тора.

Беренсе өлөш (1-10 һорауҙар) уҡыусыға дөрөҫ яуапты һайлап алыу мөмкинлеге бирә. Ә икенсе өлөштә уҡыусыға текст буйынса һорауҙарға ҡыҫҡа яуап яҙырға кәрәк. Был өлөштәрҙә уҡыусыларҙың башҡорт теленең төрлө бүлектәре (фонетика, лексика, морфология, синтаксис) буйынса тупланған теоретик белемдәре тикшерелә.

Өсөнсө өлөштә иһә уҡыусыларҙың яҙма телмәре анализлана (21-се бирем).

# Биремдәрҙең имтихан эсендә сағылышы

| Имтихан эше бүлектәре | Бирем дәрҙең һаны | Йыйырға мөмкин балдар һаны | Биремдәрҙең төрҙәре |
|---|---|---|---|
| Беренсе бүлек | 10 | 10 | Яуабын һайлап алыу мөмкинлеге булған эш биремдәре |
| Икенсе бүлек | 10 | 30 | Ҡыҫҡа яуап талап иткән эш биремдәре |
| Өсөнсө бүлек | 1 | 10 | Киңәйтелгән яуап биреүҙе талап иткән эш биреме |
| Бөтәһе | 21 | 50 | |

## Имтихан биремдәрен йөкмәткеһенә һәм эш төрҙәренә нигеҙләнеп бүлеү

Имтиханда төп дөйөм белем биреү мәктәбен тамамлаусыларҙың башҡорт теленән алған белемдәре Кодификаторға нигеҙләнеп тикшерелә. Унда белемгә ҡарата ҡуйылған талаптар һәм белем элементтары асыҡ күрһәтелгән.

Беренсе сиратта, текст ярҙамында тел буйынса теоретик белем тикшерелә. Башҡорт теленең фонетика, лексика, морфология, синтаксис кеүек бүлектәренән тупланған белем барлана. Аҙаҡтан уҡыусыларҙың тел материалын яҙмала ҡуллана алыу мөмкинлектәре баһалана. Грамоталылығы, үҙ фекерен яҙма формала дәлилләй алыуы, яҙма тексттың йыйнаҡлығы

Имтихан тапшырыу өсөн 90 минут ваҡыт бирелә.

Уҡыусылар контроль-үлсәү материалдары эш биремдәре текстары менән тәьмин ителергә тейеш. Эш биремдәренә яуаптарҙы уҡыусылар яуаптар бланкыһына яҙалар. Имтихан ваҡытында уҡыусы төрлө һүҙлектәр менән файҙалана ала.

**Айырым биремдәрҙе һәм эште тулайым баһалау системаһы**

Беренсе өлөштә яуабын һайлап алыу мөмкинлеге булған һорауға дөрөҫ яуап биргән өсөн, уҡыусы 1 балл ала. Яуап дөрөҫ булмаһа йәки бөтөнләй яуап бирмәһә, 0 балл ҡуйыла.

Икенсе өлөштә уҡыусы текст буйынса бирелгән һорауҙарға ҡыҫҡа яуаптар яҙырға тейеш. Дөрөҫ яуап 3 балл менән баһалана, яуап дөрөҫ булмаһа, 0 балл ҡуйыла.

Өсөнсө өлөштә (21-се һорау) яҙма эштең йөкмәткеһе һәм грамоталылығы өсөн уҡыусы 10 балл йыя ала.

Уҡыусыға, дөйөм алғанда, имтихан өсөн максималь 50 балл туплай ала.

| **Һорау һандары** | **Критерий** | **Балл** |
|---|---|---|
| **1-10** | Уҡыусы тарафынан яуап дөрөҫ билдәләнгән. | **1** |
| | Уҡыусы тарафынан яуап дөрөҫ билдәләнмәгән йәки яуап юҡ. | **0** |
| **11-20** | Уҡыусы тарафынан яуап дөрөҫ бирелгән. | **3** |
| | Уҡыусы тарафынан яуап дөрөҫ бирелмәгән йәки яуап юҡ. | **0** |
| **21** | Яҙма текстың күләме 10 һөйләм, эҙмә-эҙлекле төҙөлгән, хатаһыҙ яҙылған, фекер теүәллеге хас. | **10** |
| | Яҙма текстың күләме 7 һөйләм, хаталары бар, фекер теүәллеге етешмәй. | **5** |
| | Яҙманың күләме 5 һөйләмдән артмай, хаталар күп, фекер теүәллеге юҡ йәки бирем бөтөнләй башҡарылмаған. | **0** |
| **Һөҙөмтәлә** | Максималь балл | **50** |

Уҡытыу рус телендә алып барылған белем биреү ойошмаларының IX класс уҡыусылары өсөн туған (башҡорт) телдән 2023 йылда дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үткәреү өсөн уҡыусыларҙың төп дөйөм белем биреү программаһын үҙләштереү кимәленә талаптар һәм йөкмәтке элементтарының кодификаторы

**Кодификатор ике өлөштән тора:**

1. Башҡорт теленән дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы эшендә тикшерелә торған уҡыусыларҙың әҙерлек кимәленә талаптар.
2. Башҡорт теленән дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы эшендә тикшерелә торған йөкмәтке элементтары.

**Башҡорт теленән дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы эшендә тикшерелә торған уҡыусыларҙың әҙерлек кимәленә талаптар**

| **Талаптың коды** | **Талаптар** |
|---|---|
| **1** | **Белергә/аңларға** |
| 1.1 | Башҡорт теленең функциональ тәбиғәтен |
| 1.2 | Башҡорт теленең фонетик системаһын |
| 1.3 | Башҡорт теленең лексик үҙенсәлектәрен |
| 1.4. | Башҡорт теленең һүҙ төҙөлөшөн |
| 1.5. | Башҡорт теленең һүҙ төркөмдәрен, уларҙың һәр береһенә хас тел сифаттарын |
| 1.6 | Башҡорт теленең синтаксик нескәлектәрен |
| 1.7. | Башҡорт телендә тыныш билдәләрен ҡуйыу ҡағиҙәләрен |
| 1.8. | Тел берәмектәренә анализ яһай (фонетик, лексик, морфологик, синтаксик анализ) |
| 1.9. | Лингвистик терминдарға билдәләмә бирә. |
| **2** | **Яҙыу** |
| 2.1 | Яҙмала башҡорт теленең орфографик нормаларын һаҡлау. |
| 2.2 | Яҙмала башҡорт теленең орфографик принциптарына таяныу. |
| 2.3 | Яҙмала пунктуацион хаталар ебәрмәү. |
| 2.4 | Яҙмала төрлө тел-һүрәтләү сараларын актив ҡулланыу. |
| 2.5 | Фекерен яҙмала дәлилләй алыу, уны эҙмә-эҙлекле текст формаһында тәҡдим итеү. |

**Башҡорт теленән дәүләт йомғаклау аттестацияһы эшендә тикшерелә торған йөкмәтке элементтары**

| **Контроль-үлсәү материалының коды** | **Тикшерелә торған материалдың йөкмәткеһе** |
|---|---|
| **1** | **Тел материалы** |
| 1.1 | Фонетика. Башҡорт телендә өндәр системаһы. |
| 1.2 | Лексикология. Башҡорт теленең һүҙлек составы. |
| 1.3 | Һүҙьяһалыш. Башҡорт телендә һүҙьяһалыш юлдары. |
| 1.4. | Морфология. Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре. |
| 1.5. | Синтаксис. Ябай һөйләм синтаксисы. Ҡушма һөйләм синтаксисы. |
| 1.6 | Пунктуация. Башҡорт телендә тыныш билдәләрен ҡуйыу ҡағиҙәләре. |
| 1.7. | Башҡорт телендә тел берәмектәренә анализ төрҙәре (фонетик, лексик, морфологик, синтаксик). |
| **2** | **Яҙыу** |
| 2.1. | Башҡорт теленең орфографик нормалары. |
| 2.2. | Башҡорт теленең орфографик принциптары. |
| 2.3. | Тел-һүрәтләү саралары |

Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының IX синыф уҡыусылары өсөн 2023 йылда туған (башҡорт) телдән дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үткәреү өсөн контроль-үлсәү материалдарының демонстрацион варианты

Демонстрацион вариант уҡыусыларҙа контроль-үлсәү материалдарының структураһы, эш биремдәренең күләме, формаһы, ҡатмарлылыҡ дәрәжәһе тураһында дөйөм күҙаллау булдырыуҙы күҙ уңында тота. Имтиханға әҙерлек барышында уҡыусыларға белемдәрен өлөшләтә тикшерер өсөн эш биремдәренә яуаптар ҙа тәкдим ителә. Яуаптарҙы баһалау критерийҙары уҡыусыларҙа һәм, ғөмүмән, киң йәмәғәтселектә яуаптарға ҡуйылған талаптар тураһында күҙаллау тыуҙыра, әҙерлек процесында иғтибар ителәһе мәсьәләләрҙе күтәреп сыға.

Башҡорт теленән имтихан ваҡытында уҡыусылар төрлө эш биремдәре башҡаралар.
Беренсе сиратта тест үтәләр. 1-10-сы һорауҙарға яуап варианттары араһынан 1 генә дөрөҫ яуапты билдәләргә кәрәк, 11-20-се һорауҙарға текст буйынса ҡыҫҡа яуап яҙыу талап ителә.Был һорауҙар уҡыусының башҡорт теле бүлектәрен өйрәнеп (фонетика, лексика, морфология, синтаксис) туплаған теоретик белемен барлай, төрлө тел нормаларының үҙләштереү кимәлен тикшерә.
21-се биремдең тәбиғәте башҡа. Бында яуап варианттары юҡ, башҡорт халҡының киң билдәле мәҡәле йәки әйтеме, башҡорт теленең фразеологик берәмеге бирелә. Уҡыусы шул тел элементының мәғәнәһен асыҡларға тейеш (5-10 һөйләм). Был яҙма текста фекер киңлеге, тел-һүрәтләү саралары ҡулланылышы, грамоталылыҡ мөһим.

**Ҡайһы юлдағы һүҙҙәр төркөмөндә хәрефтәр һәм өндәр һаны тап килмәй?**

а) көньяҡ, балыҡ, тау;

б) егет, ҡуян, юл;

в) төньяк, кейек, ауыл;

г) аръяҡ, тейен, йәй.

**Килтерелгән синонимик рәттә ҡайһы һүҙ стилистик яҡтан нейтраль (доминанта) һанала?**

а) матур;

б) сибәр;

в) күркәм;

г) гүзәл.

**Ҡайһы юлда бөтә һүҙҙәр ҙә яһаусы ялғауҙар (аффикстар) ярҙамында яһалған?**

а) ташсы, ташбаш

б) ашнаҡсы, ашаны

в) эшсе, эшсән

г) ялған, ялдан

**Икенсе өлөш**

**Тексты уҡып сығығыҙ. Текст аҫтындағы һорауҙарға яуап бирегеҙ.**

(1) Әҙәм үлер саҡмы ни инде. (2) Көн йөҙө аяҙ, ер йөҙө алсаҡ. (3) Яңы ҡалҡып килгән бәпкә үләне өҫтөндә яңы морон төртөп сыҡҡан тауыҡ себештәре сипылдап йөрөй. (4) Кәртә башында ҡысҡырып торған **йәшкелт** тажлы ерән әтәс, йөрәгенә сыҙай алмай, аласыҡ түбәһенә осоп ҡуна, былай ҙа оҙон муйынын тағы ла һуҙа төшөп, ике күҙен тәгәрәтеп, уғата ярһып һөрәнләргә керешә. (5) Ҡуш йоҙроҡ дәүмәле генә ала көсөк, муйыл ботағында ултырған сонтоҡ ҡойроҡ**ло** ҡарт турғайға нимәлер янап, киҫәк-киҫәк өрөп ала. (6) Тегеһенең ғәмендә лә юҡ (...) үҙенекен сәрелдәй бирә. (7) Һәр тере зат, һәр (...) эйәһе — хатта үлән ҡыяғы, хатта тиреҫ себене үҙе тураһында донъяға иғлан итә: (8) «И-һи-һи! — ти. — Мин тыуҙым, мин **уяндым**. Хәбәрһеҙ тороп ҡалмағыҙ!»

**Текстағы (3) һөйләм әйтелеү маҡсаты буйынса ниндәй һөйләм төрөнә ҡарай?**

**(2) ҡушма һөйләм төрөн билдәләгеҙ.**

**(4) һөйләмдә “йәшкелт” сифаты ниндәй дәрәжәлә килә?**

**(5) һөйләмдән хәл әйтемен табып яҙығыҙ.**

**Өсөнсө өлөш**

***“Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ”*** **мәҡәлен нисек аңлайһығыҙ?** (8-10 һөйләм менән яҙығыҙ).

**Яуаптар бланкыһына башта һорауҙың һаны (номеры), унан һуң яуап яҙыла. Уҡыусы теге йәки был һорауға яуап бирә алмаһа, һорау һанынан һуң яуап урынына һыҙыҡ (прочерк) ҡуйыла.**